1941 - 1945

Бөрйән район үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы
Исламбай ауыл китапханаһы

Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған район конкурсы

# «Бөйөк Ватан һуғышы минең ғаиләм тарихында»




Автор: Хәйбуллин Рушан Фәнис улы
Етәксеһе: Әхмәтйәнова Флүзә Батыр ҡыҙы

# Һуғыш... 1941-1945

**Һуғыш...** Миллионлаған кешеләрҙең ғүмерен өҙгән, беҙҙең бөгөнгө бәхетле тормошобоҙ өсөн ҡан ҡойҙорған ҡәһәрле һуғыш. Яуыз дошманды еңгәнсе беҙҙең илебеҙгә йән аямай дүрт йыл һуғышырға, егерме миллондан ашыу кеше ғүмерен ҡорбан итергә тура килде. Гитлерсылар беҙҙең илебеҙгә генә лә 1710 ҡаланы һәм 70 меңдән артыҡ ауылды талап, ҡыйратып яндырып үттеләр... Ләкин кешелеккә үлем янаған фашизм үҙенең өңөнә ҡыуып алып барылып дөмөктөрөлдө, рейхстаг түбәһенә совет һалдаты ЕҢЕҮ Байрағын ҡаҙаны.



1941 - 1945

Беҙҙең райондан да күп кенә ир - егеттәребеҙ ҡулдарына ҡорал алып илде һаҡларға тип яуға оҙатыла. Шуныһы үкенесле, һуғыш йылдары беҙҙән йыраҡлашҡан һайын яу - ғәрәсәт күргән ветерандарыбыҙҙың сафы ла һирәгәйә бара. Ләкин уларҙың күрһәткән батырлыҡтары мәңге онотолмай - улар һаман иҫтә, ил, халыҡ хәтерендә.



1941 - 1945

# *Ауылыбыҙ ғорурлығы*

Тыуған ерем һәм азат ил өсөн, тыуасаҡ таң һәм матур көн өсөн, ҡорбан булған яугирҙарыбыҙҙың береһе  ҡартатайым **Хәйбуллин Хәмит Сабит улы** хаҡында һөйләмәксемен.





1941 - 1945

Хәмит олатай 1918 йылдың сатлама һыуыҡ ғинуар айында Исламбай ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул тормоштоң бөтә ауырлыҡтарын күреп, яҙмыш һынауҙарында сынығып, етемлек, ғазаптарына кисереп үҫә. «Киров» колхозында малсылыҡта эшләй. Ағас ҡырҡа, мал аҙығы әҙерләй. Сәғиҙә өләсәйем һөйләгән иҫтәлек – хәтирәләрҙән иҫләүенсә, өләсәй менән олатайыҙың бала саҡ йылдары бергә үтә. Инде буй еткереп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫтыҡ тигәндә, фашист илбаҫарҙары илебеҙгә баҫып инә.

Олатайҙың иңенә 1940 -1945 йылдарҙа ауыр һәм яуаплы хеҙмәт – үҙ Ватанын һаҡлау бурысы төшә.





1945 йылдың апрель айы. Совет ғәскәрҙәре фашист илбаҫарҙарын Германияға табан ҡыуа. 70-се армияның 96-сы уҡсылар корпусын сираттағы ҡаты алыш көтә: **уларға Висла йылғаһының теге яҡ ярын дошмандарҙан азат итеү бурысы йөкмәтелә**. Йылға аша сығыу бөтөнләй мөмкин түгел, дошмандар, бар көсөн һалып, оборона тота. Һалдаттарға һыуға төшөү менән берәм-берәм ҡырыла. Висла йылғаһы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡан төҫөнә мансыла. Һыуға ямғыр кеүек пуля яуа. Башты күтәреп ҡарарлыҡ та мөмкинселек юҡ.

Разведчик олатайым беренселәрҙән булып һыуға ташлана. Дуҫтарының хәрәкәтһеҙ ҡалған кәүҙәләрен күреп бер аҙ ҡаушап ҡала, ләкин үҙен тиҙ генә ҡулға алып, алға ынтыла. Йылғаның уртаһына еттем тигәндә, көслө шартлау яңғырай. Олатайҙың уң яҡ ҡулына һәм ҡабырғаһына йәҙрә ярсығы тейә. Хәле тамам бөтөп, күҙ алды ҡараңғылана башлағас ҡына, ул аяғының ергә тейеуен тоя һәм һуңғы көсөн йыйып, ярға сыға...



Был ҡанлы алышта уларҙың разведка төркөмөнән ни бары **6 кеше генә тере ҡала.** Шулай итеп, күп юғалтыуҙар менән егеттәр ҡуйылған бурысты үтәй. Висла йылғаһының аръяғы фашистарҙан таҙартыла. Ауыр йәрәхәтләнгән олатайым, ҡыҙғаныска ҡаршы, Германияға тиклем бара алмай. Ҡаты яраланған олатайҙы госпиталгә оҙаталар. Госпителдә аңына килә алмай көндәр буйы хәрәкәтһеҙ ятҡан олатайҙы шәфҡәт туташтары **«Был кешегә барыбер йән кермәҫ» тип, мәйеттәр янына сығарып һалалар** һәм яугир хаҡын да бөтөнләй онотала.

Күпмелер ваҡыт үткәс, иҫенә килгән олатай үҙенең ҡайҙа ятҡанлығын аңламай. Ул бер ҡулы ярҙамында шыуышып йөрөй торғас, ишек асылып китә һәм бүлмәгә һүрән генә яҡтылыҡ тарала. Үләләр бүлмәһенән шыуышып сығып килгән һалдатты күреп шәфҡәт туташтары шаҡ ҡаталар. Шулай ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә ул бер тапҡыр үлеп терелә. Госпиталдә алты ай буйы дауаланғандан һуң, һыңар ҡулы зәғиф килеш, Башҡортостанға әйләнеп ҡайта.

1940 йылда уҡ хеҙмәткә алынып, инде 6 йылдан һуң тыуған яғына әйләнеп ҡайтҡан олатайым, бер ҡулы йөрөмәһә лә, ҡайтыу менән баштан-аяҡ эшкә сума, колхозды күтәреүҙә ҡатнаша.



Ут-һыуҙарҙы үтеп, ауыр тән яралары алып, үҙенең Тыуған ил алдындағы бурысын намыҫ менән үтәгән Хәмит олатайым 1986 йылда 66 йәшендә генә  яҡты донъя менән хушлаша.

...Ҡаршы яҡ ярға беренселәрҙән булып сыҡҡаны һәм ҡаһарман батырлығы өсөн, 70-се армия командующийы, Хәмит олатайымды Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим итә. Ләкин билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында, был исем тапшырылған урыҫ егеттәре араһында олатайымдың исеме булмай сыға... Ә башҡорт һалдаты олатайыма ордендар ғына эләгә. Хәйер, "эләгә" тиеү ҙә дөрөҫ үк тугел, сөнки был наградалар олатайыма бөтөнләй бирелмәй ҡала....

Ә... 2001 йылдың 9 май байрамы алдынан Бөрйән районы Исламбай ауылында йәшәүсе хеҙмәт ветераны Сәғиҙә өләсәйемә райондың хәрби комиссариатынан: «Һеҙҙең иптәшегеҙ Хәйбуллин Хәмит Сабит улы 1945 йылда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ һәм 2-се дәрәжә «Бөйөк Ватан һуғышы» ордендары менән бүләкләнгән, шуларҙы килеп алығыҙ!» - тигән саҡырыу хаты килеп төшә.



Сәгиҙә менән Хәмит Хәйбуллиндар, иңгә-иң терәшеп, 40 йылға яҡын бергә йәшәне

Иле, халҡы алдында үҙ бурысын намыҫ менән үтәгән олатайымдың үҙ хеҙмәте өсөн баһаһын күрмәйенсә был донъянан китеп барыуы, бер түгел ике орденын үҙ ҡулдары менән күкрәгенә тағып тыуған ауылы урамынан бер уҙа алмауы бигерәк үкенес...

# Олатайымдың миҙалдары















# Олатайымдың ордендары:
# II дәрәжә «Бөйөк Ватан һуғышы»






# «Ҡыҙыл Байраҡ» ордены






13:17 2 / 6

Все графы заполнить полностью

# НАГРАДНОЙ ЛИСТ

1. Фамилия, имя и отчество Хайбуллин Хамит Сабитович
2. Звание красноармеец 3. Должность, часть Разведчик 199 отд. разведыват. роты 165 стрелковой Седлецкой Краснознаменной ордена Кутузова второй степени дивизии

Представляется к Ордену «Красного Знамени»

4. Год рождения 1920 5. Национальность Башкир 6. Партийность б/партийный
7. Участие в гражданской войне, последующих боевых действиях по защите СССР и Отечественной войне (где, когда) 1-й Украинский фронт с 10.10.43 по 22.XI.43; [illegible] фронт с 23.XII.43 [illegible]; 2-й Белорусский с XI.44 г.
8. Имеет ли ранения и контузии в Отечественной войне ранен 22.XII.43 г.
9. С какого времени в Красной Армии с 20.09.40 10. Каким РВК призван Бураевским РВК Башкирской АССР
11. Чем ранее награжден (за какие отличия) Наград не имел
12. Постоянный домашний адрес представляемого к награждению и адрес его семьи

I. Краткое, конкретное изложение личного боевого подвига или заслуг

28.03.45 года кр-ц Хайбуллин был старшим развед. группы по разведыванию отдельных домов на окраине г. Гдыня. Наблюдением установил, что в отдельном кирпичном дому засела группа немецких солдат с ручным пулеметом, обстреливая шоссейную дорогу к г. Гдыня. Хайбуллин принял решение: атаковать пулеметную точку пр-ка, уничтожить ее и взять пленного. Хайбуллин выполнил свое решение, рискуя своей жизнью под пулеметным огнем противника подполз с красноармейцем Степановым к дому и бросил две противотанковых гранаты в окно дома. Вскочив в дом, Хайбуллин в упор застрелил двух немецких солдат, одного немца взял в плен. Уцелевший от разрыва гранат ручной пулемет повернул его в сторону противника и открыл пулеметный огонь, чем самым создал в рядах противника панику, создав возможность ворваться нашей пехоте на окраину города Гдыня и успешно продвигаться в город. За смелые и решительные действия кр-ц Хайбуллин достоин правительственной награды Орден «Красного Знамени».

«27» марта 1945 г.

Командир 199 отд. разв. роты

(звание) [illegible] /Викторов/

13:19 6 / 6

Все графы заполнить полностью

# НАГРАДНОЙ ЛИСТ

1. Фамилия, имя и отчество Хайбуллин Хамит Сабитович
2. Звание красноармеец 3. Должность, часть разведчик 199 отд. разведыв. роты 165 стрелковой Седлецкой Краснознаменной ордена Кутузова второй степени дивизии

Представляется к Ордену «Отечественной войны второй степени»

4. Год рождения 1920 5. Национальность башкир 6. Партийность б/партийный
7. Участие в гражданской войне, последующих боевых действиях по защите СССР и Отечественной войне (где, когда) 1-й Украинский фронт с 10.10.43 по 22.XI.43; [illegible] фронт с 23.XII.43 по 11.XI.44 г.; 2-й Белорусский фронт с XI.44 года
8. Имеет ли ранения и контузии в Отечественной войне
9. С какого времени в Красной Армии с 20.09.40 10. Каким РВК призван Бураевским РВК Башкирской АССР
11. Чем ранее награжден (за какие отличия) наград не имел
12. Постоянный домашний адрес представляемого к награждению и адрес его семьи

I. Краткое, конкретное изложение личного боевого подвига или заслуг

За время форсирования рек Восточного и Западного Одера кр-ц Хайбуллин показал себя смелым и стойким воином.
Находясь в головном взводе кр-ц Хайбуллин в числе саперов первым 18.04.45 г. достиг восточной дамбы, где продвигался несмотря на сильный вражеский арт-обстрел до подхода нашей пехоты.
В бою с 19.04.45 г. на 20 апреля кр-ц Хайбуллин продвинулся более чем на 3-х км вместе со своим взводом западной дамбы и при ликвидации вражеского боевого охранения гранатами уничтожил двух солдат противника.
Находясь на дамбе кр-ц Хайбуллин участвовал в отражении 4-х контратак немцев, наши вышли со своих укрытий и с криками «Вперед за Сталина» обратили солдат противника в бегство.
При форсировании Западного Одера кр-ц Хайбуллин первым выскочил из лодки на берег и первым ворвался в немецкие траншеи, уничтожив при этом 3-х солдат противника.
За проявленные смелость и стойкость кр-ц Хайбуллин достоин правительственной награды
Орденом «Отечественная война второй степени».

«24» апреля 1945 г.

Командир 199 отд. развед. роты

(звание) [illegible] /Викторов/

# Сталиндан алған «Рәхмәт» ҡағыҙы



# Олатайым, өләсәй һәм балалары менән





Тәбиғәт ҡосағында балалары һәм ейәнсәрҙәре менән

# 1941 - 1945

Тыуған ер, азат ил өсөн ҡорбан булған олатайымдың исемен мәңгеләштереп, ауылдаштары Исламбай ауылының бер урамын олатайымдың исеме менән йөрөтәләр.






1941 - 1945

Хөрмәтле яугирҙәребеҙ, һеҙ күрһәткән батырлыҡтар бер ваҡытта ла онотолмаҫ, һеҙҙең ҡаһарманлыҡ алдында баш эйәбеҙ!



1941 - 1945

# Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

